***Мәликә ӘМИНЕВА,***
***1999—2013 йылдарҙа***
***“Ватандаш” журналының яуаплы сәркәтибе***

# Оҙон-оҙаҡ йәшә, “Ватандаш”!



“Башҡорт энциклопедияһы” ғилми нәшриәтендә производство бүлеге мөдире булып эшләп йөрөгән сағым. “Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия” тигән бер томлыҡтың рус телендәге баҫмаһын донъяға сығарып, башҡортса тәржемәһен типографияға тапшырып, гөр килеп күп томлыҡ өҫтөндә эшләйбеҙ.

Шулай бер көн Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов менән һөйләшеп ултырабыҙ. Ул: “Ватандаш” журналына яуаплы сәркәтип кәрәк ине, редакция эшендә лә, полиграфия өлкәһендә лә тәжрибәһе булған егәрле генә берәйһен белмәйһеңме?” — тине. Мин, ҡапыл ғына әйтә алмайым шул, эҙләп ҡарармын, тип һүҙ биреп ҡалдым. Уйлап йөрөйөм, уйлап йөрөйөм, кемде тәҡдим итергә тип баш ватам. Шунда бер уй килде — бәлки, үҙем булдырырмын? Нәшриәт эшен яҡшы беләм, полиграфия ла ят түгел, энциклопедияла эш яйға һалынған, журналда ла үҙемде һынап ҡарағы килде лә китте. Ғайса Батыргәрәй улына шылтыратып, ошо хаҡта әйткәйнем, ул шатланып риза булды. Иң ҡыйыны нәшриәт директоры Уйылдан Ғилман улы Сәйетовҡа эштән китеү хаҡында ғариза менән инеү булды. Миңә ул оҙаҡ ҡына үпкәләп тә йөрөнө шикелле.

Шулай итеп, 1999 йылдың декабрь башында “Ватандаш” журналында яуаплы сәркәтип булып эш башланым. Редакцияла республикала киң танылған ҡәләм оҫталары — Рәүеф Насиров, Ризван Хажиев, Сәлимйән Бәҙретдинов, Зөһрә Алтынбаева, Миңниса Баһуманова, Эльвира Халиҡова һәм башҡа билдәле журналистар эшләй ине. Улар рәтенә бер аҙҙан танылған яҙыусы Таңсулпан Ғарипова килеп ҡушылды. Уның халыҡ араһында киң танылған “Бөйрәкәй” романы ла редакцияла эшләү осоронда тыуҙы. Әле булһа ғәжәпләнәм — журналдың һәр һанына ниндәй ҙә булһа материал әҙерләү, командировкаларға йөрөү, уҡыусылар менән осрашыуҙар ойоштороуҙан тыш, шундай роман яҙыу өсөн ҡайҙан шул тиклем көс һәм ваҡыт тапҡандыр?! Таңсулпан Ғариповаға ла ижад итергә ваҡыт етмәй башланы, буғай, эштән китте. Уны шағирә Тамара Юлдашева алмаштырҙы.

Һуңыраҡ Хоҙай мине тағы бер талантлы яҙыусы менән осраштырҙы — редакцияға эшкә Гөлсирә Ғиззәтуллина килде.

Киң эрудициялы, фәлсәфәүи фекерле, донъяуи мәсьәләләргә үҙенсәлекле ҡарашлы Закир Зиннәтуллин менән бәхәсләшә-бәхәсләшә рәхәтләнеп эшләнек.

Ғ.Хөсәйенов урынына баш мөхәррир булып килгән Фәрит Әхмәҙиевты коллектив һағайып ҡаршы алды. Һағайырға урын да бар шул — танылған әҙип, тәжрибәле олпат ғалимды әлегә билдәһеҙ йәш кеше алыштыра алырмы? Әлбиттә, был аҙым Ф.Әхмәҙиевҡа ла еңел бирелмәгәндер, тип уйлайым. Баштараҡ аңлашылмаусанлыҡтар байтаҡ булды. Йәшлек максимализмы ла, амбициялар ҙа көслө булғандыр, тим. Әммә алдынғы ҡарашлы, тынғыһыҙ йәш мөхәррир кәртәләр һындыра-һындыра алға ынтылды, тәжрибә тупланы, үҫте, беҙгә лә тынғылыҡ бирмәне. Яңы рубрикалар өҫтәлде, коллектив эҙләнде, ваҡыт, заман талаптарына яуап бирерҙәй материалдар тупланды. Райондар, ҡалалар, ауылдар буйлап күп йөрөлдө. Республикала барған үҙгәрештәр хаҡында тулы мәғлүмәтле мәҡәләләр йыйылды. Ул саҡта реклама характерындағы мәҡәләләргә лә байтаҡ урын бирелде. Бер район тормошо тотош бер рубрикала яҡтыртылды. Алдынғы эшҡыуарҙар, уларҙың халыҡ өсөн тырышыуҙары тураһында очерктар донъя күрҙе журнал биттәрендә. Юғары уҡыу йорттары студенттары, мәктәп уҡыусылары, ғөмүмән, журнал уҡыусылар менән күпләп осрашыуҙар ойошторолдо. Журналдың тиражы 7 меңдән ашып китте ул йылдарҙа.

Ә инде секретариатта йыйылған мәҡәләләр, очерктар, халыҡ ижады, тарихҡа ҡағылышлы материалдар йыллап сират көттө. Әлбиттә, көнүҙәк проблемаларҙы яҡтыртҡандары тиҙерәк донъя күрҙе.

Ғөмүмән, миңә — эшкә килгән мәлемдә инде биш тиҫтәне артмаҡлаған, характеры формалашҡан кешегә — “Ватандаш”та эшләү ҙур һынау осоро булды. Журнал авторҙары — башҡорт халҡының ғорурлығы булған билдәле ғалимдар, яҙыусылар, шағирҙар менән эшләүемә ғорурланам.

Журналдың бөгөнгө баш мөхәррире Азамат Рәмил улы менән бер генә йыл эшләргә насип булды. Ул бик тынғыһыҙ, креатив етәксе, баҫманың башҡорт халҡы өсөн ни саҡлы әһәмиәтле икәнен яҡшы аңлай. Киләсәктә лә журнал үҙенең биттәрендә йәмғиәт тормошоноң халыҡ өсөн иң мөһим, әһәмиәтле яҡтарын яҡтыртып, йылдар дауамында булдырылған принциптарына тоғро ҡалып, халҡыбыҙҙың милли үҙаңын үҫтереүгә йүнәлтелгән позицияһынан тайпылмай, уҡыусыларын шатландырып, дәртләндереп, оҙон-оҙаҡ йылдар йәшәр, тип ышанам.